**Википедия** – төрлө телдә төҙөлгән ирекле интернет энциклопедия.

Кешелек туплаған барлыҡ ғилем, барлыҡ мәғлүмәт һәр халыҡтың туған телендә ирекле ҡулланыуҙа булырға тейеш, тип иҫәпләй Википедия ирекмәндәре.

Берҙән, бындай ҡараш Ер йөҙөндәге һәр кешегә ғилем туплау өсөн бер тигеҙ мөмкинлек бирә, һәр яңы быуын вәкилдәренең икенсе телде өйрәнеүгә тотонолған сығымдарын кәметә.

Икенсенән, үҙ телендә сит милләттәрҙең мәҙәниәтен, тарихын, донъяға ҡарашын өйрәнгән кешенең сит телдәрҙе өйрәнеүгә теләге көсәйә.

Өсөнсөнән, мөмкинлектәре киң булмаған халыҡтар өсөн туған телде ҡулланыу даирәһе арта. Сөнки Википедияны төҙөүҙә һәр кем ҡатнаша ала.

- Тәүлегенә **500 миллион** кеше Википедия уҡый;
- Барлыҡ тел бүлектәрендә **50 миллион** мәҡәлә бар;
- Мәҡәләләрҙе бер айҙа **320 мең** ирекмән мөхәррирләй;
- Википедия **304** телдә алып барыла;
- Google, Facebook, YouTube, Amazon Alexa, Yandex сайттары Википедия мәғлүмәтен ҡуллана.

**Википедияның төрлө маҡсатлы бик күп туғандаш проекттары бар:**

- Викидәреслек – йәмғиәт милкенә күскән уҡыу-уҡытыу әсбаптары;
- Викиһүҙлек – күп функциялы һүҙлек һәм тезаурус;
- Викикитапхана – йәмғиәт милкенә күскән ғилми һәм әҙәби әҫәрҙәр тупланмаһы;
- Викиөҙөмтә – лаҡаптар, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр йыйынтығы;
- Викидата – барлыҡ ғилемдең структурланған мәғлүмәт базаһы;
- Викимилек – аудио, видео, фото файлдар тупланмаһы;
- Викияңылыҡтар – мәғлүмәт агентлығы, яңылыҡтар сайты;
- Викиверситет – интерактив мәғариф һәм асыҡ ғилми проекттары;
- Викитөрҙәр – биологик төрҙәр хаҡында белешмәләр йыйынтығы;
- Викисәйәхәт – туристар һәм сәйәхәтселәр майҙаны.

**Википедияны мәктәптәрҙә ҡулланыу мөмкинлектәре:**

- дәрес конспекты, реферат, презентация, үҙаллы эш өсөн мәғлүмәт, фото, аудио, видео файлдар алыу;
- автор хоҡуҡлы методик материалдарҙы Викикитапханаға, Викидәреслеккә йәки Викимилеккә ҡуйыу;
- ижади эштәрҙе теркәп барыу, файҙалы ҡоралдарға, мәғлүмәт сығанаҡтарына һылтанмалар туплау;
- тема буйынса төшөнсәләр, уҡылған әҫәрҙәр, шәхестәр тураһында Википедия мәҡәләһен яҙыу йәки тулыландырыу;
- тематик порталдар, проекттар, исемлектәр төҙөү, уларҙы тематик категорияларға туплау;
- мәктәптең үҙ порталын төҙөү, мәктәп менән бәйле иҫтәлекле ваҡиғалар, шәхестәр тураһында мәҡәләләр яҙыу;
- әҙер материалды, мәҡәләне, проектты ҡағыҙға баҫтырып алыу йәки файлға күсереү.

**Файҙалы һылтанмалар:**

**https://outreach.wikimedia.org/wiki/Education**
Википедияла уңышлы мәғариф тәжрибәләре;
**https://meta.wikimedia.org/wiki/Wikipedia_%26_Education_User_Group**
Ирекмәндәрҙең халыҡ-ара «Википедия һәм Мәғариф» төркөмө;
**https://github.com/nevmenandr/bashkir-language-resources**
Башҡорт теленең интернет ресурстары.

**Википедия XXI быуат һәләттәрен үҫтерә:**

- Белемде камиллаштырыу һәм инновация үрҙәрен яулау һәләттәре: төплө фекер йөрөтөү һәм проблемаларҙы хәл итә белеү, аралашыу һәм хеҙмәттәшлек итеү, ижадкәрлек һәм яңынан-яңы асыштар яһау;
- Цифрлы өлкәлә төплө белем алыу һәләттәре: мәғлүмәтте оҫта ҡуллана һәм тарата белеү, заманса IT технологияларҙы үҙләштереү;
- Карьера һәм тормош һәләттәре: тиҙ төшөнөү һәм уңайлыҡтар менән файҙалана белеү, инициативалы һәм үҙаллы булыу, үҙ-ара социаль һәм мәҙәни йоғонто яһау, һөҙөмтәле һәм яуаплы йәшәү.

**Википедияның төп биш ҡағиҙәһе:**

1. Мәҡәләләрҙе энциклопедистика ҡағиҙәләре буйынса яҙығыҙ;
2. Мәғлүмәткә ҡарата рыяһыҙ, объектив булығыҙ;
3. Авторлыҡ хоҡуҡтарын боҙмағыҙ, мәғлүмәтте үҙ һүҙҙәрегеҙ менән яҙығыҙ;
4. Бер-берегеҙҙе ихтирам итегеҙ, иғтибарлы булығыҙ;
5. Был дүрт ҡағиҙәнән башҡаларын үҙегеҙ бергәләп яҙығыҙ.

**Башҡорт Википедияһы тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт:**

Башҡорт Википедияһында «Башҡортостан» исемле беренсе мәҡәлә 2005 йылдың 16 апрелендә яҙылған. Әлеге ваҡытта дөйөм йөкмәткеһе 15 миллион һүҙҙән торған 48 мең мәҡәлә бар. Уларҙы көн һайын 15-17 мең тапҡыр уҡыйҙар. Башҡорт телендәге бүлек Википедияның иң яҡшы 100 проекты исемлегенә инә.

Башҡорт телендә үҙаллы Википедия һәм Викидәреслек, дөйөм Викимилектә һәм Викидатала, Рус Викияңылыҡтарында башҡорт бүлеге бар. Инкубаторҙа Викиһүҙлек, Викикитапхана, Викиөҙөмтә үҫтерелә. Башҡортостан ирекмәндәре халыҡ-ара кимәлдә үткәрелгән сараларҙа даими ҡатнаша.

**Файҙалы һылтанмалар:**

**http://ba.wikipedia.org**
Башҡорт Википедияһы адресы;

**https://ba.wikipedia.org/wiki/Портал:Башҡорт_әҙәбиәте**
Башҡорт әҙәбиәте порталы;

**https://vk.com/bash_wikipedia**
«Бәйләнештә» БашВики төркөмө;

**https://www.youtube.com/channel/UCCDxGfA1KjJo-XYQroe15EA**
ЮТУБ каналында ҡыҫҡа вики-дәрестәр;

**https://ba.wikipedia.org/wiki/Википедия:Башҡортнамә** – мәҡәләләр исемлеге.

Кешелек туплаған барлыҡ ғилемде һәр кем ирекле ҡулланған донъяны күҙ алдына килтерегеҙ.

Беҙ нәҡ шул донъяны төҙөйбөҙ!

Википедия
Ирекле энциклопедия

БАШҠОРТОСТАН
викимедиасылары
төркөмө

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезында ҡатнашыусыларға